

# «М.Аkмулла»

## электрон мультимедиялы әсбап

*Башkарзы: Босов А.*
«Информатика» бүлеге студенты

*Етәксеhe*: Кәримова Г.Я.,
башkорт теле уkытыусыhы

Туймазы, 2014

## Аңлатмалы һүҙ

«Кеше ғүмере – аkkан һыу. Шул ағышта һин үҙ булмышыңды күрһәтә алдыңмы, халkым тип яндыңмы, хеҙмәтеңә һалған көс-ғәйрәтеңдән, аkыл-зиһенеңдән сатkылар тамдымы, атkарған эшеңдән күңелең kандымы? Бына ошо һорауҙар кеше ғүмеренә баһа биреүсе төп алымдарҙың береһелер», - ти билдәле ғалим Р. Аҙнағолов. Бөгөнгө йәштәргә лә үҙ тормошона kарата шундай мөнәсәбәт тыуҙырырға нисек өйрәтергә һуң? Аҙаk үкенмәçлек итеп лайыkлы ғүмер кисерергә ниндәй «һуkмаkтарҙы» һайларға?

Элек-электән халkыбыҙ балаларҙы тәрбиәләгәндә шундай ысулдар kулланған: йәштәргә өлгө булырҙай кешеләр тормошо менән таныштырған, әҙәп-әхләkkә өйрәтерлек төрлө әçәрҙәр - мәkәл-әйтемдәр, әкиәттәр, легендалар һөйләгән. Беҙҙең башkорт яҙыусылары, уларҙың әçәрҙәре лә ошондай көс-kөҙрәткә эйә түгелме һуң?! М. Кәрим, һ. Дәүләтшина, Ш. Бабич, М. Аkмулла, С. Юлаев кеүек көслө шәхестәрҙең тормошо һәм ижадынан күп нәмәләргә өйрәнергә була. Улар беҙҙе рухландыра, ҙур эштәргә әйҙәй.

Тимәк, әҙәбиәт дәрестәренең бөгөнгө заман мәктәп уkыусыһын яҙыусы шәхесе өлгөһөндә һәм әçәрҙәре аша тәрбиәләү мөмкинлеге ҙур. Беҙҙеңсә, уkытыу процесында информацион-технологияларҙы kулланыу был мөмкинлекте арттыра ғына. Башkорт әҙиптәре араһынан беҙҙе М. Аkмулла исеме kыҙыkһындырҙы. һәр халыkтың үҙ дәүеренә kарата алдынғы фекер йөрөтөүсе аkыл эйәләре була. Улар – милләтте яkтылыkkа, белемгә, ғилемгә өндәүсе, халkы, туған теле, мәҙәниәте яҙмышы хаkында борсолоусы ябай һәм бөйөк шәхестәр. Шуларҙың береһе – халkын яkын күреп «башkорттарым» тип өндәшеүсе, рух һағында тороусы шағир-гуманист М.Аkмулла. Уның ижады үлемһеҙ,

тормошо күптәргә өлгө. Шуға күрә лә ғалимдар, яҙыусылар, уkытыусылар һәм алдынғы кешеләр унын тормошон өйрәнә, тикшерә, әҙип хаkында әҫәрҙәр ижад итә. Аkмулла исемендәге премиянын булыуы, Туkһанбай ауылында музей асылыуы, БДПУ-ға унын исеме бирелеүе, халыk-ара кимәлдә конференциялар ойошторолоуы – бөтәһе лә халkыбыҙҙын шағирҙы нисек яратыуын, ихтирам итеүен күрһәтә. Шулай итеп, XXI быуат кешеләрен уйландырырлыk әҫәрҙәр ижад иткән, иман, әҙәп, сабырлыk, ихласлыkkа саkырыусы XIX быуат шағиры кем булған, ниндәй уй-ниәттәр менән йәшәгән? Алда әйтелгәндәр беҙҙе «М.Аkмулла» исемле электрон әсбап буйынса эшләргә алға әйҙәне.

Эшебеҙҙен төп маkсаты: әҙип шәхесен, тормошон һәм ижадына бәйле материалдарҙы өйрәнеп, уkытыу процесында kулланыу өсөн уңайлы электрон мультимедиялы әсбап әҙерләү.

Түбәндәге бурыстарҙы билдәләнек:

- Аkмулла тормошон һәм ижадын өйрәнеү.
- Ғилми һәм методик хеҙмәттәрҙе, публицистик мәkәләләрҙе, әҙип тормошон яktыртыусы сәнғәт һәм әҙәби әҫәрҙәрҙе өйрәнеү, туплау, системаға һалыу.
- Уkытыу процесында kулланырға мөмкин булған һәм Аkмулла ижады менән kыҙыkһыныусы бөгөнгө заман уkыусыһына аңлайышлы электрон вариантта материалдар әҙерләү.
- Аkмулла исеменен бөгөнгө көндә лә онотолмауын күрһәтеү, уға kарата ихтирам тойғоһон уятыу, уkыусыларҙы унын өлгөһөндә тәрбиәләргә булышлыk итеү.

Беҙҙен күҙаллауыбыҙса, мультимедиялы әсбап уkытыусыға дәрестәрҙе ойоштороуҙа ярҙам итер, уkыусылар kыҙыkлы мәғлүмәттәр менән

танышыр, Аҡмулла – башҡорт халҡының бөйөк улы тигән хәҡиҡәткә инаныр.

## Хеҙмәттең структураһы:

### 1-се бит. Меню.




### 2-се бит. Инеш.



## 3-сө бит. Мәктәптә әҙип ижадын өйрәнеү.




- Аkмулла биографияһы (Таблица. Презентация).
- Изге уkытыусы *(Аkмулла биографияһы рус телендә).*
- Шиғырҙар *(башkорт һәм рус телдәрендә).*
- Шиғырҙарының идея-проблематик офоkтары (*Текст. Презентация).*
- Аkмулла шиғырҙарының жанр үҙенсәлектәре *(Текст. Схема).*
- Дәрестәр *(3 дәрес)*
- Тестар
- Мәkәләләр

Беҙ күп кенә методик хеҙмәттәрҙе kарап сыkтыk һәм kыҙыkлы тип табылған дәрес һәм мәkәләләрҙе лә был бүлеккә kуйырға булдыk.

## 4-се бит. Аҡмулла образы әҙәбиәттә.




- Аҡмулла образы әҙәбиәттә. (*Текст. Презентация.)*
- Арнауҙар*. (Башҡорт әҙиптәренең Аҡмулла хаҡындағы шиғри әҫәрҙәре)*
- Библиография

## 5 -се бит. Аҡмулла образы сәнғәттә.




- Аkмулла образы һынлы сәнғәттә. (*Текст. Презентация.)*
- Фильмдар

  1-се фильм. Личность в башкирской истории: Акмулла

  2-се фильм. М.Акмулла в башкирском просветительстве
- Бәйет
- Йыр.

**6-сы бит. М.Аkмулла исемендәге премия лауреаттары.**

(*Презентация.*)

***7-се бит. Музей.*** *(Презентация.)*

Kайһы бер текстар презентациялар менән тулыландырыла. Бирелгән теоретик материалға нигеҙләнеп, уkытыусы йәки уkыусы дәрестә презентацияға буйынса һөйләргә мөмкин. Шулай уk уkыусылар тест ярҙамында үҙ белемдәрен тикшерә ала.

Мультимедиялы әсбапты әҙерләгәндә төрлө сығынаkтарҙы файҙаландыk. Улар түбәндәгеләр:

- фәнни хеҙмәттәр (Р.Шәкүр, Ғ. Kунафин, Ә Вилданов эштәре һ.б.);

- методик хеҙмәттәр («Б.У» журналында сыҡҡан мәҡәләләр, төрлө методик ҡулланмалар, йыйынтыҡтар һ.б.) ;
- гәзит-журналдарҙа сыҡҡан мәҡәләләр: («Йәшлек», «Тамаша», «Ағиҙел», «Аҡмулла төйәге», «Ватандаш» гәзит һәм журналдары);
- сәнғәт әҫәрҙәре (төрлө рәссам картина репродукциялары, скульптура әҫәрҙәре, документаль фильмдар);
- әҙәби әҫәрҙәр (башҡорт әҙиптәренең роман, повесть, шиғыр һәм поэмалары).

Мультимедиялы ҡушымтаға минималь системалы талаптар

- Операцион система: Windows 7/Windows Vista/XP;
- Видеокарта: 256 МБ видеохәтер;
- Процессор: Pentium Intel 4 CPU 1.70 GHz;
- Оператив хәтер: 736 МБ ОЗУ;
- Ҡаты диск: 175 МБ ирекле урын;
- Привод: DVD-ROM;
- Программа менән тәьмин итеү: IE (6.0 версияһынан түбән түгел)/ Firefox (4.0.1 версияһы)/Google Chrome (12.0. версияһы һәм юғарыраҡ), Adobe Flash Player (в 10.3.181.14 версияһы һәм юғарыраҡ), JavaScript, MS Power Point, төрлө mp4 проигрыватель (Power DVD)
- Тәҡдим ителгән монитор киңлеге - 1280/1024

Хеҙмәттәге текстар Pom Bsh шрифы менән яҙылғандар. Шуға күрә компьютерға был шрифты ҡуйырға кәрәк (Шрифт папка эсендә).

Мультимедиялы әсбапты әҙерләүҙә бер нисә студент ҡатнашты. «Аҡмулла шиғырҙарының жанр үҙенсәлектәре», «Шиғырҙарының идея-проблематик офоҡтары», «Аҡмулла образы әҙәбиәттә» исемле курс эштәре, сығарылыш квалификацион хеҙмәттәренән материалдар файҙаланылды. (авторҙары Ғәниева З., Садрисламова А, Шәрипова Я., Зәйҙуллин А., етәксеһе Кәримова Г.Я.). Педколледж уҡытыусылары ла был темаға битараф түгел. Уларҙың хеҙмәттәрен ҡулландыҡ (Кәримова

Г.Я., Йосопова З.В.). Информатика бүлеге студенты Алчинова А. бөтә электрон материалды йыйҙы, Босов А. мультимедиялы әсбап әҙерләне. Был эште башkарыуҙа информатика уkытыусыhы Нәсибуллин А. ярҙамлашты.

Дөйөм алғанда, хеҙмәтебеҙҙә материалдарҙы туплап, Аkмулла хаkында тулы картина тыуҙырырға тырыштыk. Был - беҙҙең фәнни эҙләнеүҙәр, ижади уйланыуҙар һөҙөмтәhе. «М. Аkмулла» электрон мультимедиялы әсбапты башkорт теле һәм әҙәбиәт, Башkортостан мәҙәниәте уkытыусыларына, студенттарға, шағир ижады менән kыҙыkhыныусыларға тәkдим итәбеҙ.

## Һығымта

«М. Аkмулла» электрон мультимедиялы әсбап шағирыбыҙҙың еңел булмаған kатмарлы тормошон байkарға, унын рухи булмышын аңларға ярҙам итә.

Р. Фәхретдинден шундай һүҙҙәре бар: «Әҙип һәм ғалимдары булмаған халыk бәхетheҙ, мәшhүр кешеләрен онотkан халыk яklаусыhыҙ, әҙәбиәте булмаған милләт рухhыҙ». Эйе, беҙҙең халыk бәхетле, яklаусылы, милләтебеҙ рухлы. Әҙәбиәтебеҙҙең йөҙөк kашы булырлыk бөйөк шағир М.Аkмулла хаkындағы беҙ тәkдим иткән хеҙмәт дәрес һәм дәрестән тыш сараларығыҙҙы күркәмлерәк, kыҙыklырак, һөҙөмтәлерәк итер тип ышанабыҙ.